*Динара КӘРИМОВА*

# Илһамлы ижад юлы



*Башкортостандың халык артисы Әхәт Хөсәйенов*

”Хаҡлы ялға сыҡһам, ҡалала бер көн тормайым, икенсе көндө үк ауылға һыҙам. Рәхәтләнеп балыҡ ҡармаҡлайым, көн һайын мунса яғып төшәм, урман-ҡырҙар ҡыҙырасаҡмын...”

Һуңғы йылдарҙа Әхәт ағай ауыҙынан был һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Уның доға урынына ҡабатлаған һүҙҙәренә күптәр күнегеп бөткән, уларҙы бер кем ысынға алмай кеүек — ни тиһәң дә, күп осраҡта артист үҙ яҙмышына яҙғанынан ситкә китә алмай. Ә, икенсенән, алтынсы тиҫтәһен тултырған артист ең һыҙғанып ижад итә, бер-бер артлы өр-яңы ролдәр өҫтөндә эшләй. ”Хушығыҙ, хыялдарым!” драмаһында (Ә.Атнабаев) — Самат, ”Тиле йәшлек”тә (И.Абдуллин) — оло Хәниф, ”Ҡыҙыл йондоҙ” драмаһында (М.Ғафури, Н.Ғәйетбаевтың сәхнә редакцияһында) — Шиһап, ”Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”та (М.Кәрим, Р.Исрафилов инсценировкаһы) — Сафа, ”Мәһәре — байҙан!” комедияһында (Ю.Болат) Аджиәмит һәм башҡа спектаклдәрҙә ул уйнаған ролдәр тамашасы һөйөүен яуланы.

Һөйөү тигәндән, Әхәт Хөсәйенов йәш сағында бик осһоҙға ғына ”һөйҙөргөс бетеүе” алып таға. Әхәт ағай үҙе ул хәлде шулай тасуирлап һөйләй.

”Миңә ул саҡта, ун алтым тулып, ун етенсе йәш киткәйне. Күңелгә мөхәббәт тойғоһо инә башлағайны инде. Ауылымдың бер һылыуын күңелем менән һөйәм, йөрәгем менән ғашиҡ, ә телем менән уға мөхәббәтемде әйтә алмайым. Егеттәр миңә ”быҙау” тигән ҡушамат та таҡты.

Башыма төшкән ”ҡайғыны” күршебеҙ Хөснулла ағайға тиштем. Ул миңә хәйләкәр генә йылмайып, ҡап-ҡара мыйығын яҫы устары менән һыйпап ҡуйҙы ла: ”Беләһеңме, ҡустым, йәш саҡта минең үҙем менән дә шулай булғайны. Ғәбиҙә еңгәң артынан йөрөп күпме сабата туҙҙырғанмындыр, әйләнеп тә ҡараманы. Уйланым-уйланым да, Яҡуп ҡарттан ”һөйҙөргөс” доғаһы яҙҙырып алдым. Шуны яғаға тағып аҙна-ун көн йөрөгәс, еңгәгеҙ үҙе башлап мөхәббәтен белдереп хат яҙҙы. Һин дә шулай ит. Хәйергә биш һум аҡса, йәнә ун йомортҡа бирһәң — шул еткән”, — тине.

Икенсе көндө әсәйемдән биш һум аҡса һорап алдым, йәнә аҙбарға инеп, тауыҡтарҙың яңы ғына һалған йомортҡаларын кеҫәгә тултырҙым да... киттем Яҡуп ҡартҡа. Ҡулымдағы байлығымды күргәс, ҡарт ҡәнәғәт

йөҙ менән: ”Хуш, нимә өсөн доға ҡылабыҙ?” — тип һораны. Мин уға ни йомош менән килеүемде түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙем. Ҡарт көттөрмәне, ул доға яҙып биргән теге бетеүҙе яғаға тегеп тә ҡуйҙым.

...Кисен клубҡа киттем. Ҡыҙҙар миңә ҡарап шырҡ-шырҡ көлөшкән була, ә егеттәр үҙ-ара ниҙер шыбырлаша. Күрәһең, ҡыҙҙарҙың миңә ҡарап йылмайыуҙарынан көнләшәләр!.. Көтмәгәндә һөйгән ҡыҙым яныма килеп: ”Нимә яғаңды һыйпайһың? Әллә Яҡуп ҡарттың алдашып яҙған ”һөйҙөргөс”ө төшөп ҡалдымы?” — тимәһенме?! Ә егеттәр: ”Алты һум егерме тинлек ”һөйҙөргөс” таҡҡан бетеүле быҙау”, — тип, күҙ ҙә астырмай көләләр. Ғәрлегемдән сығып йүгерҙем... Өйгә ҡайттым да яғалағы бетеүҙе ҡуптарып алып, эсендәге ҡағыҙын йыртып ташларға булдым... Яҙыуына күҙем төштө. Беҙҙең хәрефтәр менән:

”Уны һөйҙөң ни миңә,
Быны һөйҙөң ни миңә,
Биш һум аҡса, ун йомортҡа
Ярамаймы ни миңә?” —

тип яҙылған юлдарҙы уҡып, ер тишегенә инерҙәй булдым”.

Шундай мажара үтә үҫмер сағында артист башынан. Хәйер, был мажара тормошта ысынлап булғанмы, кем белә... Юмористик хикәйәләре, көләмәстәре, артистар тормошонан ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалары менән дә таныш бит тамашасыларға Әхәт Хөсәйенов. Шуға күрә, ҡайһы ваҡиға булған, ҡайһыһы булмаған, әйтеүе ҡыйын...

Әхәт ағайҙың геройҙарына килгәндә, уларҙың һәр береһендә, һис шикһеҙ, ”һөйҙөргөс бетеүе” бар: М.Кәримдең ”Айгөл иле” пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә — Ричард Галин, ”Ҡыҙ урлау”ында — Дәүләтбай һәм Ҡотлоәхмәт, И.Абдуллиндың ”Их, Өфө ҡыҙҙары!” комедияһында — Жарыҡбай, Ф.Бурнаштың ”Йәш йөрәктәр”ендә Ғәлимйән һәм башҡалар — һәммәһе лә тамашасы күңелендә үҙ урынын тапҡан. Уның Хәнифе (”Тиле йәшлек”, И.Абдуллин) башҡаларынан да уҙҙырып ебәрҙе — Бытбылдыҡ уға махсус яҙылған ”Тәү тапкыр ҡыҙҙар янына барыусы егеттәр өсөн. Профессор Һөйәрбәков докладынан өҙөк” исемле ҡулланма бүләк итә... Әхәт-Хәниф, тамашасыны көлдөрә-көлдөрә, ҡағыҙ битенә сыймаҡланған һүҙҙәрҙе уҡый: ”1. Мөхәббәтең ташып торһа ла, хистәреңде йүгәнлә, ҡулдарыңды тышаула. — Йүгәнлә, тышаула... 2. Мөхәббәт ”яратам” тигән һүҙгә мохтаж түгел. ”Яратам” һүҙе менән шаярма. Әйтһәң дә, ҡолағына ишетелер-ишетелмәҫ итеп кенә әйт. — Я-ра-там... 3. Һүҙеңде уратып-суратып, йә сәскәләрҙән, йә йондоҙҙарҙан башла. Әммә күктә оҙаҡ йөрөмә, Зөһрә йондоҙоң Айҙа түгел, һинең янында ултыра. — Ултырмай шул әле... 4. Һөйләр һүҙең булмаһа, мөхәббәт тура-

*”Тиле йәшлек” спектакленән күренеш. Ә.Хөсәйенов Хәниф ролендә. 1970 йыл*



һында шиғыр уҡы. — Ә мин ”Урамда буран”дан башҡа шиғырҙы яттан белмәйем... Урамда буран... Мин ауыҙ йырам...” Һөйгән ҡыҙы янына осрашыуға килгән егет кеҫәһенә дуҫы һалып ебәргән ”инструкцияны” сат йәбешеп уҡый, уны башына һеңдереп ҡалырға тырыша. Мөхәббәт хисенән иҫергән йәш, дәртле, күңелсәк Хәнифтең ҡыланыштарын тамашасы ихлас күҙәтә, урыны-урыны менән алҡышлай, рәхәтләнеп көлә.

И.Абдуллиндың ”Тиле йәшлек” комедияһы Башҡорт дәүләт академия драма театрында 1970, 1991, 2004 йылдарҙа ҡуйыла. Бөгөн дә ”Тиле йәшлек” — сәхнәлә. Әҫәрҙең элекке ҡуйылышында Зөлҡәрнәй, Хәниф, Бытбылдыҡты уйнаусы Фидан Ғафаров, Әхәт Хөсәйенов, Муллайән Сөйәрғолов та ҡатнаша. Ғөмүмән, был спектаклдә тамашасы быуындар алмашыныуын да, ваҡыт сиктәренең дә булмауын күрә. Бөгөнгө репертуарҙағы ”Тиле йәшлек”тә Әхәт ағайҙың Хәнифе — сәсенә сал төшкән ир уҙаманы, колхоз рәйесе һәм Юғары Совет депутаты ла.

Әхәт ағайҙың ”Хушығыҙ, хыялдарым!” драмаһындағы (режиссеры — А.Абушахманов) Самат образын да тамашасылар яратып ҡарай — унда күҙгә ташланып ”бына мин!” тип ҡысҡырып торған бер ни ҙә юҡ кеүек, әммә геройҙың ”һөйкөмлө һөйәге” шунда уҡ үҙенә йәлеп итә. Тәүге күренештән ”Ярай, бисәкәй”, ”Шулай итермен, бисәкәй”, ”Хәҙер, бисәкәй” тип туҡтауһыҙ ҡабатлап, бисәһе Мәрүә (Г.Маликова) төптән егелгән тормош арбаһында ел-ямғырҙан ҡатыны арҡаһына йәшенеп, һәүетемсә генә, ”үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын” тип йәшәп ятҡан Самат ролен уйнай артист. Самат, Мәрүә образдары спектаклгә айырыуса йәнлелек өҫтәй.

Әхәт ағай комедияларҙа рәхәтләнеп уйнай. Театрҙың 86-сы ижад миҙгелендә ҡуйылған ”Мәһәре — байҙан!” спектаклендә (Ю.Болат, режиссеры — Р.Хәкимов) ул төрөк байы Аджиәмитте башҡара. Спектакль үҙенең сәхнә биҙәлеше, йыр-моң, дәртле бейеүҙәргә һәм юморға бай булыуы, артистарҙың үҙҙәре башҡарған образдарҙы төрлө яклап асыуы менән йәлеп итә. Әхәт-Аджиәмит үҙенең һөйөклө һәм берҙән-бер ҡыҙы Нияр менән сиған малайы Әбиж араһында мөхәббәт уты ҡабыныуын һиҙеп ҡалып, уларҙың һөйөүенә ҡаршы төшә, ҡыҙын-ҡошсоғон күрше йортта ғына йәшәгән серегән бай, үҙе кеүек оло йәштәге Хәсәп Хәсәнгә кейәүгә бирергә ниәтләп, күршеһен үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Тик... Аджиәмит бай дәрт-дарманы ташып торған сиғандарға ҡаршы тора алмай — ул килеп тыуған сетерекле хәлдәр, көлкөлө ваҡиғалар теҙмәһенә юлыға...

*”Их, Өфө ҡыҙҙары!” спектакленән күренеш.*
*Жарыкбай — Ә.Хөсәйенов*



Хәйер, спектаклдә генә түгел, һөнәрен һайлағанда ла Әхәт Хөсәйенов ҡыҙыҡлы ваҡиғаға тап

була — ата-әсәһе кеүек үк йыр-моңға ғашиҡ үҫмер артист булырға хыяллана. Тауышы матур, халыҡ йырҙарын һуҙып, тыңлаусының йөрәгенә үтеп инерлек итеп, йырҙың һәр бер бөгөлөшөн оҫта итеп башҡара, халыҡ араһында киң таралған популяр йырҙарҙы ла килештереп йырлай. Үҙенең яҙмышын ҙур сәхнәгә, йыр-моңға бәйләргә теләгән егет Өфө сәнғәт училищеһына документтарын алып килә. Әммә "йырсы" менән "артист" төшөнсәләрен бер үк тип уйлаған үҫмер документтарын вокал бүлегенә түгел, ә драма артистары әҙерләгән бүлеккә тапшыра. Абруйлы ижадсыларҙан торған ҡабул итеү комиссияһында мәшһүр артистар Зәйтүнә Бикбулатова, Рим Сыртланов һәм күренекле режиссер Ғабдулла Ғиләжев була. Ике турҙы еңел үттем, тип иҫәпләгән егетте өсөнсө турҙа имтихан ваҡытында Ғабдулла Ғабдрахман улы: "Вон отсюда!" — тип ҡыуып сығара... Бер ни аңламаған егет, йә, ярай инде, ни булһа ла, мин үҙемде һынап ҡараным, артист булырға яҙмағандыр, тип хушлашып сығып китә. Әммә уны артислыҡҡа алалар. Баҡтиһәң, Ғабдулла Ғиләжев буласаҡ артисты үҙенсә һынап ҡараған икән — йәнәһе, ошондай хәлгә эләкһә, артист нисек кисерер. Шулай итеп, Әхәт Хөсәйенов һайлаған һөнәренең серҙәренә төшөнөргә фатиха ала.



"Мәһәре — байҙан!" спектакленән күренеш. Аджиәмит — Ә.Хөсәйенов

Киләсәктә йырсы түгел, ә драма артисы буласағын егет һуңынан төшөнә төшөнөүен, әммә яҙмышына яҙғанына риза булып, Фидан Ғафаров, Тәнзилә Хисамова, Рәмзиә Хисамова, Хәмзә Ҡурсаев, Фариза Хәсәнова, Хәнә Минһажева, Роза Ильясова, Әхмәт Йәнбулатов һәм башҡалар менән — барлығы 18 кеше — Өфө сәнғәт училищеһында уҡый башлай.

Студент йылдары Әхәт ағайҙың күңелендә бай тәьҫораттар ҡалдыра, уҡытыусылары, ижад емештәре менән тамашасыларҙы "аһ" итеп тетрәндергән талант эйәһе Илшат Йомағолов уларҙы театр донъяһына алып инә, сәхнә сәнғәте серҙәренә төшөндөрә, актер оҫталығына өйрәтә. Илшат Хәлил улы студенттарының һәләтен күреп ҡалһа, уларҙы дәртләндереп, илһамландырып ебәрер була. Уҡыған ваҡытта ла ул студент Әхәттең этюд эшләгәндә сюжеттарҙы оҫта уйлап табыуына, тамашасыға аңлайышлы тел менән еткереүенә иғтибар итә һәм егетте ҡулына ҡәләм тоторға өндәй. Әхәт Хөсәйеновтың юмористик хикәйәләр, көләмәстәр, артистар тормошонда үҙе шаһит булған ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы ҡағыҙға төшөрә башлауының башы шулай.

Әхәт ағайҙың күңелендә бөгөн дә Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында тыуып үҫкән ауыл малайы ултыра. Үҫмер сағында үҙенең геройы — "Тиле йәшлек"тәге Хәниф кеүек, бәхет эҙләп, тормошта үҙ урынын табырға сығып китә ул. Өфө сәнғәт училищеһын тамамлағас,

Салауат башҡорт драма театрында эш башлай. 1968 йылда Өфөгә Башҡорт академия драма театрына саҡырыла. 1992 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында рус, башҡорт һәм бейеү театрҙарын берләштергән берекмә ойоштороլғас, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрына директор булып китә. Ун йылдан һуң йәнә Өфөгә күсеп килә һәм әлеге көндә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында эшләүен дауам итә.

"Һәр әҙәм балаһында талант бар, ә сәхнә өсөн Хоҙай тарафынан да талант өҫтәлергә тейеш, — ти Әхәт Хөсәйенов. — Һәр бер ролемде бар күңелемде һалып башҡарам. Әйтәйек, Нәжиб Асанбаевтың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ҡыҙыл паша" драмаһын алайыҡ. Театрыбыҙҙың ижади тормошонда яңы баҫҡыс булып торған әҫәр йөкмәткеһе менән дә, яңыса сәхнәләштерелеүе, образдарҙың художество эшләнеше һәм бирелеше йәһәтенән дә заманында мәҙәниәттә үҙе бер ваҡиға булды. Бындай әҫәрҙә уйнау минең өсөн оло мәртәбә ине һәм ул бер ни тиклем яуаплылыҡ та өҫтәй".

"Ғәлиәбаныу"ҙа (М.Фәйзи) — Исмәғил, "Әҙәмсә йәшәһәң ине"лә (Н.Терентьев) — Кирук, Мостай Кәримдең пьесаһы буйынса ҡуйылған "Салауат" спектаклендә — Петр һәм Юлай Аҙналин, "Ай тотолған төндә" трагедияһында — Ырыҫҡол бей, "Сәсәндәр"ҙә (И.Йомағолов) — Ҡарт, Сыңғыҙ Айтматовтың "Ал яулыҡлы тирәккәйем" әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән "Юлдарым — һағышлы моңдарым" драмаһында Үрмәт әкә Аманғолов һәм башҡа бик күп ролдәрҙе — Башҡорт академия драма театрында ғына алтмыштан ашыу ролде — сәхнәгә алып сыҡҡан ул.

"Әммә роленде яратыу ғына аҙ әле. Үҙең тыуҙырасаҡ ролде бик ныҡ яратһаң да, уның һиңә тап килмәүе бар — быға һис тә аптырарға ярамай. Бына, мәҫәлән, миңә бер спектаклдә, исемен атамайым, бер геройҙы уйнарға бирҙеләр. Нисек кенә борма, нисек кенә ҡыланма, ул миңә яҡын килмәй, тип иҫәпләнем мин, шулай ҙа ролемде сығарҙым. Әммә үҙем унан ҡәнәғәтлек алманым, был ролем күңелемдә ауыр тойғолар ҡалдырҙы. Герой — минең өсөн түгел. Мин кире образдарҙы уйнарға яратам — әгәр тамашасы шундай ролдә мин уйнаған спектаклдән һуң геройыма ҡарата битараф булмаһа, икенсе төрлө әйткәндә, яратмаһа, тимәк, ул образды мин астым, еренә еткереп уйнаным, тигән фекерҙәмен", — ти Әхәт ағай сәхнәгә алып сыҡҡан образдары хаҡында.

Сәхнәлә 40 йыл ижад ғүмерендә артист тиҫтәләрсә кеше яҙмышын тамашасылар хөкөмөнә алып сыҡҡан, уның геройҙары — үҙенең замандаштары, тимәк, әйтер һүҙе лә замандаштарына йүнәлтелгәндер. Бөтә күңелен биреп уйнағанға, ул геройҙар тамашасы һөйөүен яулаған. Бөгөн дә сәхнәгә тоғролоҡ, ижад кешеһенә хас булған эҙләнеүсәнлек сифаттары артисҡа тынғылыҡ бирмәй — ул яңынан-яңы образдар тыуҙыра, һайлаған һөнәренә ҙур ихласлыҡ менән ҡарай.

"Сәхнә сәнғәте донъяһы, театр — ғүмерлеккә йөрәгемде яулаған, йәшәргә көс, аң-зиһенемә бөтә нәмәгә сәнғәт бейеклегенән ҡарау һәләте биргән мөхитем ул", — ти Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Хөсәйенов.

Ошо мөхиттә тағы ла оҙон-оҙаҡ һәм илһамлы тормош менән йәшәргә яҙһын, тибеҙ беҙ актерға.